**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ И НАУКИ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН**

**МКУ отдел образования МР Учалинский район РБ**

**МБОУ СОШ имени героя Советского Союза Сунагатуллина Жавдата Гумурзаковича с.Имангулово муниципального района Учалинский рай**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| ШМО учителей начальных классов | Заместитель директора по УВР | Директор школы |
| Шаяхметова Р.Л.. | Хисамова Э.Р. | Ахмедьянов Д.Р. |
| Протокол №1 от «29» августа 2025 г. | от «29» августа 2025 г. | Приказ №24 от «29» августа 2025 г. |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

**учебного предмета**

**«Литературное чтение на родном (башкирском) языке»**

для обучающихся 3 класса

**с. Имангулово 2025**

## Анлатма яҙыу

Уҡыусыларҙа формалаштырылған түбәндәге сифаттар әҙәби уҡыу предметын өйрәнеүҙең ишм и һо.тм гәләре булып тора:

— Тыуған илгә, уның тлена, мәҙәниәтенә, тарихына һөйөү һәм хөрмәт;

— төрлө ситуацияларҙа йәштәштәре һәм ололар менән хеҙмәттәшлек күнекмәһе, конфликтлы һәм бәхәсле ситуацияларҙан сығыу юлын белеү, толерантлыҡ;

— әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү; хислелек, үҙеңдең хис-тойғоларыңды аңлай һәм белдәләй (әйтә) белеү;

— башҡа кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлай һәм билдәләй белеү, уртаҡлаша алыу;

— матурлыҡ тойғоһо — тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш;

— нәфис һүҙҙең матурлығын тоя белеү, үҙеңдең телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

— ғаилә ҡиммәттәрен аңлау, үҙеңдең яҡындарыңа ҡарата ихтирам, рәхмәт, яуаплылыҡ тойғолары;

— текст авторы менән диалог ҡороуға ҡыҙыҡһыныу, уҡыуға ихтыяж;

— үҙеңдең һәм әйләнә-тирәңдәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү;

— мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсе этик тойғолар — намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып, ғәфү үтенеү.

Әҙәби әҫәрҙәрҙең текстары, уларға бирелгән һорауҙар һәм эштәр, һөҙөмтәле уҡыу технологияһы был һөҙөмтәләргә ирешеү сараһы булып тора.

«Әҙәби уҡыу» предметының дөйөм (метапредмет) һөҙөмтәләре булып, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген (УУЭ) формалаштырыу тора.

**Көйләүсе УУЭ (регулятивные УУД):**

— дәрестең темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы әйтә белеү;

— уҡытыусы менән берлектә уҡыу проблемаһын сисеүҙең планын төҙөү;

— ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү өсөн планды тормошҡа ашырыу, кәрәк осраҡта үҙеңдең эшмәкәрлегеңә төҙәтмәләр индереү;

— уҡытыусы менән берлектә баһалау критерийҙарын билдәләү һәм шуға ярашлы үҙеңдең һәм иптәштәреңдең эшенә баһа бирә белеү.

Һөҙөмтәле уҡыу технологияһы һәм уҡыусыларҙың уҡыуҙағы уңыштарын баһалау технологияһы универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу саралары булып тора.

**Танып-белеү УУЭ (познавательные УУД):**

— текстағы мәғлүмәттең бөтөн төрҙәрен дә иҫәпкә алыу;

— уҡыу төрҙәрен маҡсатҡа ярашлы файҙаланыу: текст менән танышыу өсөн уҡыу, күҙ йүгертеп уҡып сығыу, мәғлүмәт алыу өсөн ентекләп уҡыу;

— төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица);

— мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү (план, схема, таблица төҙөү);

— һүҙлектәр, белешмә материал менән файҙалана белеү;

— анализлай һәм синтезлай белеү;

— сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү;

— фекерләй белеү.

Дәреслектең текстары һәм уның методик аппараты, һөҙөмтәле уҡыу технологияһы танып-белеү УУЭ үҫтереү саралары булып тора.

**Коммуникатив УУЭ (коммуникативные УУД):**

— телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү һәм яҙма формала бирә белеү;

— телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу, телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;

— үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;

- башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡа раштарын аңларга тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдең ҡарашыңды үҙгәртә алыу;
- дөйөм эшмәкәрлек һарышында ҡарар 'кабул итә белеү;
- һорауҙар бирә белеү.

**«Әҙәби укыу» курсының предмет һөҙөмтәләре булып түбәндәге күнекмәләрҙең формалашыуы тора:**

- әҙәбиәттең дойом һәм милли мәҙәниәтте сагылдырыусы күренеш булыуын, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе, традицияларҙы һаҡлау һәм быуындан быуынға еткереү сараһы икәнлеген аңлау;
- уҡыуҙың шәхси үҫеш өсөн әһәмиәтен аңлау, Тыуған ил һәм уның кешеләре, тирә-яҡ донъя тураһында хәбәрҙар булыу;
- уҡытыусы, укыусылар башҡарыуында текстарҙы тыңлап ҡабул итә белеү;
- аңлап, дөрөҫ, тасуири итеп ҡысҡырып укыу;
- текстың исеменә, авторҙың фамилияһына, иллюстрацияларға, терәк һүҙҙәргә ҡарап уның йөкмәткеһен күҙаллау;
- таныш булмаған тексты эстән укыу, һүҙлек эшен үткәрә белеү;
- тексты өлөштәргә бүлеү, ябай план төҙөү;
- текстың төп фекерен үҙ аллы билдәләй белеү;
- текстан геройҙы ҡылыҡһырлаусы материалды таба белеү;
- тексты тулыһынса һәм һайланма һөйләй белеү;
- геройға ҡылыҡһырлама бирә белеү;
- телдән һәм яҙма һүрәтләй белеү;
- уҡыу барышында картиналарҙы күҙ алдына килтереп һөйләй белеү;
- уҡылғанға ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү, ни-мәнең ни өсөн оҡшағанын (оҡшамағанын) аңлата алыу;
- асыкланған билдәләре буйынса әҫәрҙәрҙе хикәйә, повесть, пьеса жанрҙарына бүлә белеү;
- проза әҫәрендә геройҙы, авторҙы һәм һөйләүсене айыра белеү;
- нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙарҙы, эпитеттарҙы, йәнләндереүҙәрҙе күрә белеү;
- уҡылған әҫәрҙәрҙә авторҙы, геройҙарҙы һәм әҫәрҙең исемен дөрөҫ атау.

**Уҡылғанды аңлау алымдарын формалаштырыу**

Әҫәрҙең исеме менән эшләү оҫталығы (уның тура һәм күсмә мәғәнәһен аңлау, исемен йөкмәткеһе, төп фекере менән тиңләштереү, төрлө текст атамалары араһынан бер авторҙымын таныу). Әҫәрҙең йөкмәткеһен исеме, иллюстрациялар, терәк һүҙҙәр ярҙамында күҙалларға өйрәтеү, текстка үҙ аллы исем уйлау.

***Оҫталыкты үҫтереү:***

- текста йәки текстың өлөштәрендә терәк һүҙҙәрҙе айырырға өйрәтеү, төп фекер менән терәк һүҙҙәр араһында бәйләнеш булдырыу;
- тексты өлөштәргә үҙ аллы бүлеү, исем ҡушыу, тотош әҫәрҙең йәки һәр өлөштөң төп фекерен билдәләү;
- ябай план төҙөү (текстың һөйләмдәренән төҙөлгән план);
- текстың структураһын укытыусы тәкдим иткән план менән тиңләштереү;
- герой тураһындағы хикәйәнең планын үҙ аллы төҙөү;
- тексты укыу алдынан ҡуйылған һорауҙарға яуап биреү;
- текстка үҙ аллы һорауҙар төҙөү. Уҡыу барышында уның йөкмәткеһен күҙаллау;
- ниндәйҙер фекерҙе иҫбатлау өсөн һайлап укыу;
- бәйләнешле һөйләү һәм яҙма телмәрҙе үҫтереү.

***Өйрәтеү:***

- тексты план буйынса тулы һәм ҡыҫҡартып һөйләү;
- текстың төрлө өлөштәрен һайлап һөйләү;
- текстка телдән һүрәтләмә төҙөү;
- бер герой исеменән телдән хикәйә төҙөү;
- шиғырҙарҙы һәм проза әҫәрҙәрен тасуири укыу, өҙөктәрен дөрөҫ интонация, темп, тон менән, логик баҫым ҡуйып яттан һөйләү;

— һәр бүлек аҙағында ижади характерҙағы яҙма эштәр үткәреү. Ижади эштәр: иншалар, хикәйәләр, шиғырҙар яҙыу.

Башланғыс класта уҡыу дәрестәренең маҡсаты — балаларҙы нәфис әҙәбиәт уҡырға өйрәтеү, уны төп мәктәптә системалы өйрәнеүгә әҙерләү, уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу, грамоталы уҡыусы тәрбиәләүҙең нигеҙен булдырыу. Грамоталы уҡыусы ул уҡыу техникаһын белгән, уҡығанын аңлаған, китаптарҙы белгән һәм уларҙы доньины танып-белеү сараһы итеп таныған кеше.

Был маҡсатҡа ирешеүҙә түбәндәге мәсьәләләрҙе хәл итергә көрөк:

- уҡыу техникаһын һәм тексты аңлау алымдарын формалаштырыу - бер үк вакытта уҡыу процесына ҡыҙыҡһыныу уятыу Һәм уҡыу ИХТЫЯЖЫН булдырыу;
- әҙәбиәт аша балаларҙа әхлаҡи ҡиммәттәр тәрбиәләү;
- балаларҙы һүҙ сәнғәтенә ылыҡтырыу, әҙәби-теоретик төшөнсәләр менән әҫәрҙәрҙе анализлау аша практик таныштырыу;

— һөйләү һәм яҙма телмәрҙе (һүҙ байлығын), балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү.

**Һөҙөмтәле уҡыу технологияһы**

Был технология текст менән эшләүҙең 3 этабын үҙ эсенә ала:

1. Тексты уҡығанға тиклем үткәрелгән эштәр.

Тексттың йөкмәткеһен күҙаллау, унын мәғәнәүи, тематик, эмоциональ йүнәлешен асыҡлау, әҫәрҙең исеменә, авторына, терәк һүҙҙәргә, иллюстрацияларға таянып, төп геройҙарын билдәләү.

— Дәрес маҡсаттарын уҡыусыларҙың эшкә дөйөм (уҡыу, эмоциональ, психологик һ. б.) әҙерлек кимәленән сығып асыҡлау.

2. Тексты уҡыу барышында башҡарылған эштәр.

Тексты беренсел уҡыу: класта үҙ аллы уҡыу, уҡытыусы уҡығанды тыңлау, уҡыусылар менән сиратлашып уҡыу (тексттың үҙенсәлектәренә, уҡыусыларҙың индивидуаль мөмкинлектәренә бәйле). Тексты тәү тапҡыр ҡабул итеү кимәлен тикшереү. Уҡыусыларҙың күҙаллауы менән тексттың йөкмәткеһе тура килеү-килмәүен асыҡлау.

Тексты ҡайтанан уҡып сығыу. Ашыҡмайынса, уйлап ҡабаттан уҡыу (бөтөн тексты йәки өлөштәрен). Тексты анализлау (алымдар: автор менән диалогка инеү, аңлатмалы уҡыу, уҡылған буйынса әңгәмә ҡороу, терәк һүҙҙәрҙе табыу Һ.6.). Һәр мәғәнәүи өлөшкә асыҡлаусы һорауҙар биреү.

Тексттың йөкмәткеһенә таянып әңгәмә ҡороу, уҡылғанды йомғаҡлау, текстҡа ҡарата дөйөмләштереүсе һорауҙар биреү. Кәрәк булғанда, тексттың фрагменттарына мөрәжәғәт итеү, тасуири уҡыу.

3. Тексты уҡып сыҡҡас башҡарылған эштәр.

— Текст буйынса концептуаль әңгәмә. Уҡылғанды күмәкләп тикшереү, дискуссия. Уҡыусыларҙың әҫәргә биргән баһаһын автор позицияһы менән сағыштырыу. Тексттың төп идеяһын асыҡлау.

Яҙыусы менән танышыу. Яҙыусы шәхесе тураһында әңгәмә. Өҫтәлмә сығанаҡтар менән эшләү.

Тексттың исеме, иллюстрациялары менән эшләү, мәғәнәһен асыҡлау. Рәссамдың текстҡа төшөргән һүрәте менән уҡыусыларҙың күҙаллауҙарын сағыштырыу (мәҫәлән, уҡыусылар был текстҡа ниндәй һүрәт төшөрөрҙәр ине). Уҡыусыларҙың уҡыу эшмәкәрлеге менән бәйле ижади эштәр.

**«Әҙәби уҡыу» предметы йөкмәткеһендә сағылыш тапкан ҡиммәттәр:**

*Ғүмерҙең ҡиммәте* — кеше ғүмерен иң юғары ҡиммәт итеп баһалау;

*Изгелектең ҡиммәте* — тирә-йүндәге кешеләргә миһырбанлы, ярҙамсыл, игелекле булыу;

*Ирек, намыҫ ҡиммәте* — аралашыу, үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡороу ҡағиҙәләренең төп нигеҙе икәнлеген төшөндөрөү;

*Тәбиғәттең ҡиммәте* — үҙеңде тәбиғәттең бер өлөшө итеп тойоу, тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәтте нәфис әҙәбиәт һәм фәнни-популяр текстар аша тәрбиәләү;

*Ғаиләнең киммәте* — әҙәби белемдең йөкмәткеһе аша ғаиләгә, туғандарға ҡарата яҡшы мөнәсәбәт булдырыуға, ихтирам һәм яуаплылыҡ, рәхмәтле булыу, яратыу тойғоларын формалаштырыуға булышлыҡ итеү;

*Хеҙмәттең һәм ижадтың ҡиммәте* — балаларҙа хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләүҙә уҡыу эшмәкәрлеге ҙур роль уйнай. Уҡыу предметының йөкмәткеһе аша балала маҡсатҡа ынтылыусан-лыҡ, яуаплылыҡ, үҙ аллылыҡ, хеҙмәткә, һәм айырыуса яҙыусы хеҙмәтенә, ихтирам тойғоларын үҫтереү;

*Граждандлыҡ ҡиммәте* — үҙеңде йәмғиәттең, халыҡтың, илдең, дәүләттең ағзаһы итеп тойоу, илдең бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплылыҡ тойғоһо кисереү. Нәфис әҙәбиәт аша илдең, республиканың тарихына, мәҙәниәтенә, теленә, тормошона, халҡына ҡыҙыҡһыныу уятыу;

*Патриотлыҡ ҡиммәте* - Рәсәйҙе, Башҡортостанды һөйөү, уның үткәне һәм бөгөнгөһө менән ҡыҙыҡһыныу, Тыуған илгә хеҙмәт итергә әҙер булыу;

*Кешелектең ҡиммәте* - уҡыусының үҙен Башҡортостандың, Рәсәйҙең геиә грпждаиы итеп түгел, ә бөтөн донъяның бер өлонш итеп тойоуы, шул донъя йәшәһен, алға китһен өсөн хеҙмәттәшлек, килешеп йәшәү, мәҙәниәттәр төрлөлөгөн ихтирам итеү.

**Дәреслектәге уҡыу материалын яҡынса сәғәттәргә бүлеү**

1. **Белем байрамы (1 сәғ.)**

2. **Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар (7 сәг.)**

Маҡсаттар: педагогик маҡсат — тасуири уҡыу күнекмәһе булдырыу өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты — ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу күнекмәһенә эйә булыу, уҡылған әҫәрҙәрҙең төп йөкмәткеһен һөйләргә һәм авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.

3. **«Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә...» (8 сәғ.)**

Маҡсаттар: педагогик маҡсат — тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәтте нәфис әҙәбиәт һәм фәнни-популяр текстар аша тәрбиәләү өсөн шарттар тыуҙырыу, уҡыусыларҙың маҡсаты — был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә шиғырҙарҙы тасуири итеп яттан һөйләргә өйрәнеү, әҫәрҙәрҙең исемен, авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.

4. **Әҙәп төбө — матур ғәҙәт (15 сәғ.)**

Маҡсаттар: педагогик маҡсат — ваҡиғаларға, геройҙарҙың ҡылыҡтарына шәхси баһа биреү; әҫәр тексын файҙаланып, үҙеңдең фекереңде раҫлау өсөн шарттар тыуҙырыу; әҙәбиәт аша балаларҙа әхлаҡи ҡиммәттәр тәрбиәләү; уҡыусыларҙың маҡсаты был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә план ярҙамында тексты һөйләргә, әҫәрҙең йөкмәткеһен, төп фекерен билдәләргә өйрәнеү.

5. **«Тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа...» (8 сәғ.)**

Маҡсаттар: педагогик маҡсат — балаларҙы һүҙ сәнғәтенә ылыҡтырыу, әҙәби-теоретик төшөнсәләр менән әҫәрҙәрҙе анализлау аша практик таныштырыу өсөн шарттар тыуҙырыу, уҡыусыларҙың маҡсаты — ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә тексттың исеме, иллюстрациялары менән эшләү, мәғәнәһен асыҡлау, рәссамдың текcҡа төшөргән һүрәте менән үҙҙәренең күҙаллауҙарын сағыштырырға өйрәнеү.

6. **Йортом, илем, халҡым, киләсәгем (13 сәғ.)**

Маҡсаттар: педагогик маҡсат — Рәсәйгә, Башҡортостанға һөйөү, уның үткәне һәм бөгөнгөһөнә ҡыҙыҡһыныу, Тыуған илгә хеҙмәт итергә әҙер булыу өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты — ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә үҙеңде йәмғиәттең, халыҡтың, илдең, дәүләттең ағзаһы итеп тойоу, илдең бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплылыҡ тойғоһо кисереү, уҡылған әҫәрҙәрҙең авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.

7. **Әкиәт уҡырға яратам (10 сәғ.)**

Маҡсаттар: педагогик маҡсат — тексттың йөкмәткеһенә таянып әңгәмә ҡороу, уҡылғанды йомғаҡлау, текcҡа ҡарата дөйөмләштереүсе һорауҙар биреү өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты — ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә әкиәттәрҙе тасуири уҡыу, өҙөктәрен дөрөҫ интонация, темп, тон менән һөйләү.

8. **«Илде иңләп, йәмле яҙ килә...» (6 сәғ.)**

Маҡсаттар: педагогик маҡсат — нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙарҙы, эпитеттарҙы, йәнләндереүҙәрҙе күрә белеү өсөн шарттар тыуҙырыу; уҡыусыларҙың маҡсаты ошо модулде

үҙләштереү һөҙөмтәһендә тексты өлөштәргә үҙ аллы бүлеү, исем ҡушыу, тотош әҫәрҙең йәки һәр өлөштөң төп фекерен билдәләргә өйрәнеү.

Түбәнге кластарҙа әкиәт тураһында алған төшөнсәләрҙе иҫкә төшөрөү, әкиәттәрҙең төҙөлөшөн, башҡа жанрҙарҙан айырмаһын, һөйләү үҙенсәлектәрен билдәләү. Халыҡ әкиәттәре һәм яҙыусылар ижад иткән әкиәттәр. Тылсымлы әкиәттәр, батырҙар тураһында, тормош-көнкүреш әкиәттәре тураһында ҡыҫҡаса аңлатма биреү. Әкиәттәрҙең фәлсәфәүи асылына төшөндөрөү.

План буйынса әкиәтте тулы итеп һөйләү күнекмәһен артабан камиллаштырыу, үҙ аллы план төҙөргә өйрәтеү, укыусыларҙың һүҙ байлығын үҫтереүгә етди иғтибар биреү.

**ЯТЛАУ ӨСӨН ӘҪӘРҘӘР**

Мостай Кәрим. Уҡытыусыма.
Рауил Бикбаев. Көҙ.
Назар Нәжми. Ҡыш.
Ай Уралым, Уралым. (Ҡобайыр.)
Салауат Юлаев. Мин үлмәнем, башҡорттарым!
Риф Тойғон. Башҡорт булыу өсөн күп кәрәкмәй.
Рәми Ғарипов. Яҙғы йыр.
Сафуан Әлибай. Яҙ башы.
Ғариф Ғүмәр. Тамсылар.

**Уҡыу техникаһы**

Тексты тасуири итеп аңлы укыу. Уҡығанда мәғәнә яғынан әһәмиәтле һүҙгә баҫым яһау. Һөйләмдәрҙе һәм текстың бүленештәрен береһен икенсеһенән айырып укыу.

Минутына 65—70 һүҙ укыу. Эстән уҡығанда минутына 85—90 һүҙ укыу.

Уҡыу йылы аҙағына 3-сө класс укыусыһының әҙерлек кимәленә талаптар.

Уҡыусы

— тексты аңлап, тасуири уҡый,
— тексты эстән уҡый,
— уҡыған әҫәрҙең темаһын һәм төп асылын, мәғәнәһен билдәләй,
— әҫәрҙең исемен, авторын атай,
— әҫәрҙең йөкмәткеһенә тап килерлек интонация һайлай,
— темп һәм тонды дөрөҫ билдәләп, логик баҫым, пауза ҡуйып, тейешле тауыш менән уҡый,
— уҡылған әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан өлөштәргә бүлеп, планын төҙөй,
— әҫәрҙе ентекле итеп, хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле һөйләй,
— әҫәрҙе ҡыҫҡаса һөйләй,
— әҫәрҙең йөкмәткеһе, идея-тематикаһы буйынса әңгәмәләшә,
— 8 — 9 шиғырҙы яттан тасуири итеп һөйләй белергә тейеш.

**КЛАСТАН ТЫШ УҠЫУ**

Кластан тыш уҡыуҙың төп маҡсаты — укыусыларҙы балалар әҙәбиәте менән тәрәнерәк таныштырыу, ата-бабаларыбыҙ туплаған рухи байлыҡты байҡау, китапҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу, үҙ аллы даими укыу күнекмәләре булдырыу.

Уҡыу тематикаһы

3-сө класс укыусыларына кластан тыш укыу өсөн башҡорт һәм башҡа милләт яҙыусыларының балалар өсөн төрлө темаға һәм төрлө жанрҙа яҙылған иң һәйбәт әҫәрҙәрен һайлап алырға мөмкин. Бынан башҡа, кластан тыш укыу дәрестәрендә укыусылар газета-журналдар менән танышалар, «Йәншишмә» газетаһын, «Аманат», «Аҡбуҙат» журналдарын даими укып баралар, төрлө белешмә китаптар, картотека менән эш итергә өйрәнәләр. Был эште ойоштороуҙа мәктәп, ауыл, ҡала китапханаларының роле ҙур. Яҙыусылар менән осрашыуҙар үткәреү, китап укыусылар конференциялары, күргәҙмәләр ойоштороу был дәрестәрҙең әһәмиәтен бермә-бер үҫтерә.

Мостай Кәрим, Мәжит Ғафури, Зәйнәб Биишева, Мәрйәм Бураҡаева, Фәүзиә Рәхимғолова, Кәтибә Кинйәбулатова, Раил Байбулатов һ. б. яҙыусыларҙың, шулай уҡ рус һәм сит ил классиктарының балалар өсөн киң билдәле әҫәрҙәре укырға тәкдим ителә.

# Календарь-тематик план

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны | Дата | | Контроль төрө. |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План буйынса. | Үткәрелеү датаһы | |
| **Белем байрамы 1сәғ.** | | | | | |
| 1. | С.Әлибай "Өсөнсөгә күскәнбеҙ",М.Кәрим "Уҡытыусыма" | 1 | 2.09 | | |
| **Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар 7сәғ.** | | | | | |
| 2. | Сабир Шәрипов "Йәй бит был йәй!" | 1 | 4.09 | | |
| 3. | Ноғман Мусин "Бүленгән-бөлөр" | 1 | 9.09 | | |
| 4. | Ф.Туғыҙбаева"Сәс-кә телен белеүсе Сәлим" | 1 | 11.09 | | |
| 5. | Ф.Фәткуллина "Кем ғәйепле?" | 1 | 16.09 | | |
| 6 | Х.Хәйретдинов "Баҫыу Һаҡсылары" | 1 | 18.09 | | |
| 7 | Р.Байбулатов «Һарыбай» | 1 | 23.09 | | |
| 8. | Ж. Кейекбаев « Һунарсы мажаралары» | 1 | 25.09 | | |
| **Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә… 8сәғәт** | | | | | |
| 9 | М.Кәрим "Көҙ",Р.Бикбаев "Көҙ",И.Илембәтова "Көҙгө болот", АИгебаев "Сентябрь" | 1 | 30.09 | | |
| 10 | Д.Талхина "Дуҫтар көҙ ҡаршылай" Көҙҙөң аҫыл биҙәктәре. | 1 | 2.10 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 11 | Ф.Рәхимғолова “Сәйәхәт” | 1 | 7.10 | | |
| 12 | Рёшит Низамов “Ширшыбикә” | 1 | 9.10 | | |
| 13 | М.Хисмәтуллина “Япраҡтар”, А.Игебаев “Ишетәм”,”Япраҡтар”,К.Кинйәбулатова “Күҙ еткәс” | 1 | 14.10 | | |
| 14 | Ғ.Ғәлиев “Ҡоштарҙың йыйылышы | 1 | 16.10 | | |
| 15 | Ф.Фәттәхов “Серәкәй”,А.Игеба-ев “Йомарт уңыш” | 1 | 21.10 | | |
| 16 | Телмәр үҫтереү“Көҙҙөң бер көнөндә” | 1 | 23.10 | | Уҡыу техникаһын тикшереү |
| **Әҙәптең төбө-ғәҙәт 15сәғ.** | | | | | |
| 17 | “Ололар кәңәше”,”Мәктәптә иптәштәрең менән аралашыу ҡағиҙәләре” | 1 | 6.11 | | |
| 18 | Р.Ханнанов “Тырышҡан-ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан” | 1 | 11.11 | | |
| 19 | Р.Ханнанов “Тартай теленән табыр” | 1 | 13.11 | | |
| 20 | Р.Ханнанов “Кешегә баҙ ҡаҙыма,үҙең төшөрһөң” | 1 | 18.11 | | |
| 21 | Р.Ҡотошов “Кәңәшле эш тарҡалмаҫ” | 1 | 20.11 | | |
| 22 | К.Мәргән “Дуҫтар һәм дошмандар” | 1 | 25.10 | | |
| 23 | Ҡ.Даян “Өҙөлгән сәскәләр” | 1 | 27.11 | | |
| 24 | Р.Солтангәрәев “Кем алданды?” | 1 | 2.12 | | |
| 25 | А.Ғирфанов “Ҡайын” | 1 | 4.12 | | |
| 26 | Б.Байымов “Лайыҡлы бүләк” | 1 | 9.12 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 27 | Н.Игеҙйәнова “Аҡтырнаҡ” | 1 | 11.12 | | |
| 28 | И.Ғимранов “Берлектә-ҙур байлыҡ” | 1 | 16.12 | | |
| 29 | Й. Ильясова “Сәтләүек ҡыҙ. | 1 | 18.12 | | |
| 30 | Г.Скребицкий « Дуҫлыҡ һуҡмағы» | 1 | 23.12 | | |
| 31 | Телмәр үҫтереү “Беҙҙең бәләкәй дуҫтарыбыҙ” | 1 | 25.12 | | Уҡыу техникаһын тикшереү |
| **Тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа 8сәғәт** | | | | | |
| 32 | Н.Нәжми “Ҡыш”,Ш.Бабич “Ҡышҡы юлда”,М.Ғафури “Буран” | 1 | 30.12 | | |
| 33 | М.Садиҡова “Һунарға барғанда” | 1 | 13.01.2026 | | |
| 34 | Р.Хәйретдинов “Йәйәүле буран”, | 1 | 15.01 | | |
| 35 | С.Сурина “Биҙәктәрҙе кем яһаған?” С. Ҡудаш « Ҡар бөртөктәре» | 1 | 20.01 | | |
| 36 | Ш.Биҡҡол “Урман ситендә” | 1 | 22.01 | | |
| 37 | С.Сурина “Ни өсөн айыу ҡыш көнө йоҡлай?” | 1 | 27.01 | | |
| 38 | Г.Шафиҡова “Ҡыш ниңә ҡырыҫ холоҡло?” | 1 | 29.01 | | |
| 39 | Телмәр үҫтереү« Ҡышҡы күренештәр» | 1 | 3.02 | | |
| **Йортом,илем,халҡым,киләсәгем...13 (сәғәт)** | | | | | |
| 40 | Н.Нәжми “Ватан”, Р.Хәйри “Бәхәс” | 1 | 5.02 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 41 | Р.Ханнанов “Изге аманат” | 1 | 10.02 | | |
| 42 | Ғ.Хөсәйенов “Тыуған ил ҡайҙан башлана?” | 1 | 12.02 | | |
| 43 | “АйУралым,Уралым”Ж. Кейекбаев “Урал тураһында ҡобайыр” | 1 | 17.02 | | |
| 44 | Ғ.Хөсәйенов “Башҡортос-тан”. | 1 | 19.02 | | |
| 45 | Ү.Сирбаев “Самат олатай ҡайындары” | 1 | 24.02 | | |
| 46 | Р.Бикбаев “Баш ҡалабыҙ-Өфө” | 1 | 26.02 | | |
| 47 | Б.Рафиҡов “Ҡурай” | 1 | 3.03 | | |
| 48 | Т.Шаһманов “Бабсаҡ бей ырыуы” | 1 | 5.03 | | |
| 49 | Б.Рафиҡов “Салауаттың тыуған көнө нисәү?”,Т.Сәғитов “Салауатҡа-салауат” С.Юлаев “Мин үлмәнем, Башҡорттарым!” | 1 | 10.03 | | |
| 50 | С.Әлибай “Батырға үлем юҡ” | 1 | 12.03 | | |
| 51 | С.Сурина “Ере байҙың-теле бай” | 1 | 17.03 | | |
| 52 | Телмәр үçтереү  “Теле барҙың- иле бар “ | 1 | | | |
| **Әкиәт уҡырға яратам…(10 сәғ.)** | | | | | |
| 53 | В.Исхаков “Ирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы” | 1 | 19.03 | | |
| 54 | А.Шәйәхмәтова “Икмәк көсө”,”Ҡаты-ҡото” | 1 | 24.03 | | Уҡыу техникаһын тикшереү |
| 55 | “Ҡошҡа әйләнгән әбей” | 1 | 26.03 | | |
| 56 | ”Васыят” | 1 | 7.04 | | |
| 57 | А.Йәғәфәрова “Урал иле” | 1 | 9.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 58 | “Урал батыр” | 1 | 14.04 | | |
| 59 | “Алпамыша батыр” | 1 | 16.04 | | |
| 60 | “Бойҙай бөртөгө” | 1 | 21.04 | | |
| 61 | “Юлдыбай һунарсы” | 1 | 23.04 | | |
| 62 | Йомғаҡлау | 1 | | | |
| **Илде иңләп йәмле яҙ килә: 6** сәғ | | | | | |
| 63 | М.Ғафури “Яҙ етте”, Р.Ғарипов “Яҙғы йыр”, М .Кәрим “Яҙҙың бер көнөндә” | 1 | 28.04 | | |
| 64 | Ғилемдар Рамазанов “Бөйөк Еңеү”С.Разетдинов “Илде иңләп яҙ килә” | 1 | 5.05 | | |
| 65 | Р.Сәғәҙиев “Яҙ ҡайҙан килде?” | 1 | 7.05 | | |
| 66 | Ә.Хәмәтдинова “Тамсы менән Тамсыҡай”, Ғ.Ғүмәр “Тамсылар” | 1 | 12.05 | | |
| 67 | С.Разетдинов “Илде иңләп яҙ килә” | 1 | 14.05 | | Уҡыу техникаһын тикшереү |
| 68 | Йомғаҡлау дәресе. | 1 | 20.05 | | |